*Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА*

# БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕНДӘ ӘСӘНЕҢ РОЛЕ ҺӘМ СТАТУСЫ

Ғүмер ағышында ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә һәм йәмғиәттә бер нисә социаль роль башҡара. Ғүмеренең башында ул — ҡыҙ. Бер аҙҙан ул еткән ҡыҙ, кәләш, йәш килен, йәш еңгә ролдәренә инә. Ваҡыт үтеү менән ҡатын-ҡыҙ — әсә, башҡалангас — хужабикә, балалары үҫеп етеп ғаилә ҡорғас — ҡәйнә, өләсәй ролдәрен башҡара.

Бөтә халыҡтарҙа тип әйтерлек, ҡатын-ҡыҙҙың башҡарған социаль роле уның ғаиләлә, йәмғиәттә тотҡан урынын, функцияларын билдәләй. Башҡорт йәмғиәтендә лә элек-электән ҡыҙ-ҡырҡын, йәш килен, балалы һәм балаһыҙ ҡатын статусы бер иш булмаған. Тәбиғи, балаға ғүмер биреп ырыуҙы дауам итеүсе әсәнең статусы юғары булған. Шуғалыр ҙа *әсә һөтөн, әсә ҡулын* изгеләштереп ҡарау, *әсә ҡарғышының* иң ауыр ҡарғыш икәнлегенә ышаныу, туй йолаһында әсәнең күкрәк һөтө хаҡын махсүс *инә тун, инә ҡурпәһе* менән түләү киң таралған булған. Әсәнең юғары статусы уның ҡурсалаусы, һаҡлаусы булыуы менән дә бәйле. Сағыштырығыҙ: *инәң ұлһә — йылғаң ҡорор; атай — еҙнә, инәй — ҡаҙна; атаһыҙ етем — ярты етем, әсәһеҙ етем гел етем* һ.б.

Халыҡ аңында әсәнең һаҡлаусы, ҡурсалаусы булыуын һыу инәһе, тау инәһе, сәсәк инәһе, арыш инәһе кеүек һүҙҙәр һәм мифик образдар ҙа иҫбатлай. Ысынлап та, һыу инәһенең һыуҙы, тау инәһенең тауҙы һаҡлап, ҡурсалап, эйәһе булып тороуы тураһындағы бик күп легендалар, хөрәфәти хикәйәләр бар. Миҫал өсөн “Эйәле күл” легендаһын ғына килтерергә мөмкин. Легенда буйынса, күлдең эйәһе ҡатын-ҡыҙ сифатында була. Уны егеттәр тотоп ала. Күл эйәһе ныҡ ҡысҡыра, сырылдай. Егеттәр тегене ебәрергә мәжбүр була. Әммә ошо хәлдән һуң күлдең эйәһе (инәһе) ҡасҡан, күл ҡороған икән. Шулай итеп, башҡорт анында инә — ҡурсалаусы, һаҡлаусы зат. Ул һаҡлауҙан туҡтаһа, хатта күл дә, һыу ҙа ҡорой икән.

Башҡорт йәмғиәтендә әсәнең юғары статусын бала табыу, уны ҡурсалау ғына билдәләмәгән. “Бала табыу бер ҡыйын, бала бағыу мең ҡыйын”; “Баланы табыу һөнәр түгел, бағыу һөнәр”; “Бала таба белдең, үҫтерә лә бел” кеүек мәҡәлдәр әсәнең бала тәрбиәләүҙә, уны әҙәм итеүҙә роле ҙур икәнлеген күрһәтә. Ысынлап та, ил, ирек, мал-мөлкәт өсөн яу сапҡан ир-ат бала тәрбиәләү, уны тормошҡа әҙерләү менән бик үк шөғөлләнә алмаған. Шул сәбәпле был эш ғәҙәттә ҡартҡоро, ҡатын-ҡыҙ елкәһенә төшкән.

Бала тыуғас та әсә, кендек инәһе, өләсәй, апай, еңгә, инәйҙәр, йәғни ҡатын-ҡыҙҙар донъяһына барып ингән. Ҡатын-ҡыҙ уның кендеген ҡырҡҡан, кәүҙә-ҡиәфәте матур булһын тип тырышҡан, ауырып китһә, өшкөргән, им-том иткән. Тәүге ризыҡты, тәүге мунсаны ла бала әсә йәки башҡа ҡатын-ҡыҙҙар ҡулынан татый. Йәмғиәткә лә бала тәүҙә уны күрергә, уның менән танышырға килгән ҡатын-ҡыҙ, бала-саға тарафынан ҡабул ителә. Әсәһе, өләсәһе бишек йырҙары аша уға тел, моң бирә. Әсә һөтө менән балаға холоҡ, һаулыҡ, рухи байлыҡ, күңел тыныслығы һалына. Шуға ла башҡорттар: “Инә һөтө менән кермәгән, бөйә һөтө менән кермәҫ”, тиҙәр. Әсә, ғәиләләге һәм ырыуҙары башҡа ҡатын-ҡыҙҙар баланың теше күренеүе, атлай, тел сығып һөйләшә башлауы, бишек туйы, һырға туйы һ.б. менән бәйле йолаларҙа ла ҙур роль уйнай.

Күберәк әсә, өләсәй һ.б. ҡатын-ҡыҙҙар аша бала никах туйы, ерләү йолалары тураһында ла белем ала.

Әсә, башҡа ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар менән бергә сабый йәй, яҙ, көҙ, ҡыш үткәрелгән Нардуған, Науруз, Ҡарға буҡаһы, Кәкүк сәйе, Ҡуҙғалаҡ байрамы, Сөмбөлә һ.б. миҙгел

йолаларында ла ҡатнаша. Шулай итеп ҡатын кеше балаға йолалар аша быуаттар буйы тупланған рухи байлыҡты, белемде, донъяға ҡарашты тапшыра, әхлаҡ нормаларын һала.

Әсә, өләсәй тирәһендә бала дауалау, им-том итеү, ырым, юрау нескәлектәрен дә өйрәнә, үҙләштерә. Былар бөтәһе лә ғаиләлә әсә статусын күтәрә.

Әсәнең роле бигерәк тә ҡыҙҙар тәрбиәләүҙә мөһим. Шуғалыр ҙа халыҡта "Атаһыҙ ул аҫырама, инәһеҙ ҡыҙ аҫырама", "Әсәһеҙҙе "килен" тимә, атаһыҙҙы "кейәү" тимә", "Инәһен күреп ҡыҙын ал", "Инәһе ниндәй — ҡыҙы шундай" кеүек мәҡәл-әйтемдәр киң таралған. Ысынлап та, ҡыҙ бала әсәһе эргәһендә эшкә, ғөрөф-ғәҙәткә, әхлаҡҡа өйрәнә. Бәләкәй туғандарын бағып, өй эштәрендә ярҙам итеп, бергә ҡош-ҡорт, мал-тыуар ҡарап ҡыҙ бала ҡатын-ҡыҙ булараҡ формалаша, ғаиләлә килен, әсә, хужабикә булырға өйрәнә. Әсәһенең, өләсәһенең бишек йырҙарын, әкиәттәрен, алғыштарын, риүәйәттәрен күңеленә һеңдереп үҫкән ҡыҙ бала быуындар бәйләнешен булдырыусы, халыҡтың күңел байлығын тапшырыусы, башҡортлоҡто һаҡлаусы төп көскә әүерелә.

Шулай итеп, әсә балаға ғүмер биреүҙә, уны ҡурсалауҙа, тәрбиәләүҙә, әҙәм итеүҙә ғаиләлә төп роль уйнаған. Шул уҡ ваҡытта әсә элек-электән милләттең ҡурсалаусыһы ла булып торған. Быуаттар төпкөлөнән килгән телде, рухи байлыҡты, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы ул яңы быуынға тапшырып, халыҡты халыҡ итеп һаҡлауҙа ла төп роль уйнаған. Хатта, антрополог Р. Йосопов яҙыуы буйынса, әсә башҡорттоң боронғо физик тибын һаҡлаусы ла. Ысынлап та, тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ тибы башҡорттарҙа тотороҡло, йәғни меңйыллыҡтар, быуаттар үтһә лә ул әллә ни үҙгәрмәгән. Шулай итеп башҡорттоң башҡортлоҡ сифаттарын, хатта тышҡы үҙенсәлектәрен дә ҡатын-ҡыҙ, әсә һаҡлаған һәм бөгөнгө көнгә килтереп еткергән.

Әсәнең, ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләлә, йәмғиәттә тотҡан урынын, йәғни статусын элек-электән унын тормошона, көнкүрешенә, хужалыҡҡа индергән өлөшө лә билдәләгән. Бында өҫтә ҡаралған тәрбиә, бала бағыу, йәш быуынды тормошҡа әҙерләү, халыҡты халыҡ иткән сифаттарҙы быуындан быуынға тапшырыу кеүек эштәрҙән башҡаһы күҙ уңында тотола. Әлбиттә, беренсе нәүбәттә ғаиләнең тормош-көнкүрешенә, хужалыҡ һәм өй эштәренә әсәнең индергән өлөшө тураһында һүҙ бара. Шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙың илде, йортто, бала-сағаһын дошман яуынан ҡурсалауға, һаҡлауға, бигерәк тә ир-ат һунарҙа йәки яуҙа булғанда, индергән өлөшө лә ситтә ҡалырға тейеш түгел.

Ҡатын-ҡыҙҙың хужалыҡ, тормош-көнкүреш менән бәйле эштәрен шартлы рәүештә икегә бүлеп ҡарарға мөмкин: өй һәм тыш эштәре.

Традиция буйынса, өй үҙе, өй эштәре ҡатын-ҡыҙ сфераһына ҡараған. Шуғалыр ҙа башҡортта: "Ҡатын өйҙә, ир тышта булыр", "Ҡатын-ҡыҙ тышта йөрөһә лә, күңеле өйҙә", "Өйҙө өй иткән — ҡатын" кеүек мәҡәл һәм әйтемдәр бик күп. Ысынлап та, өйҙө таҙа, йылы, ҡотло итеп тотоу, аш-һыу әҙерләү, кейем-һалым, өй-ҡаралты әйберҙәрен булдырыу, ҡышҡа, яҙға запастар әҙерләү ҡатын-ҡыҙ функцияһына ингән. Шуға ла көндәлек усаҡ яғыу, икмәк һалыу, аш-һыу әҙерләү, өй ҡарау эштәренән тыш ҡатын-ҡыҙға, әсәгә йөн, дебет, киндер эшкәртеү, уларҙан алынған продукциянан тула баҫыу, ҡаралты, кейем-һалым әҙерләү; ит, һөт, игенселек продукцияларынан киптереп, ҡаҡлап, ҡыҙҙырып, тоҙлап ҡышҡы запас әҙерләү эштәре лә тура килгән. Ҡатын-ҡыҙҙың өй эштәре шул тиклем күп, халыҡ әйтмешләй, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй.

Өй эштәренән башҡа, әсәгә, ҡатын-ҡыҙға тыш эштәрендә лә ҡатнашырға тура килгән. Уларҙың иңенә мал-тыуарҙы, бигерәк тә ваҡ малды, быҙау, бәрәсте, ҡош-ҡортто бағыу ҙа төшкән. Көндәлек эштән тыш ғаиләһе менән әсә йәш малға бесән әҙерләүҙә лә ҡатнашҡан. Төп шөғөлө малсылыҡ булған башҡорттарҙа мал-тыуарҙың именлеген, үрсеүен тәьмин итә торған йолалар ҙа ҡатын-ҡыҙһыҙ үтмәгән. Мәҫәлән, мал һатҡанда ҡотто ебәрмәҫ өсөн ғәҙәттә ҡатын-ҡыҙ малдың өс еренән йөн йолҡоп алып ҡалған. Малға күҙ теймәһен тип төрлө сепрәктән муйынсаҡ, миләш ботағын да малға ҡатын-ҡыҙ таҡҡан.

Көнкүреш, хужалыҡ эштәрендә ҡатын-ҡыҙҙың роле һуғыш, яу замандарында тағы ныҡыраҡ артҡан. Әсә үҙенең балалары, ҡарт-ҡоро менән мал ҡараған, иген иккән, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ-түлек әҙерләгән.

Ярым күсмә тормошта йәшәгән саҡта йәйләүгә күсеү, унан кире ауылға ҡайтыу менән бәйле проблемаларҙы ла ҡатын-ҡыҙ хәл итергә мәжбүр булған. Ир-ат яуҙа, һунарҙа йөрөгән саҡтарҙа әсәгә ғаилә, йорт, мал-тыуар, ырыу-нәҫел именлеген һаҡларға, кәрәк булһа — ҡорал алып яҡларға ла тура килгән. Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, тарихи романдарҙа был фекерҙе иҫбатлай торған миҫалдарҙы күп табырға була. Миҫал өсөн “Уҙаман апай”, “Әүәҙбикә” тигән легендаларҙағы дошмандан зат-ырыуын, мал-мөлкәтен һаҡлап алып ҡалған килендәрҙе килтерергә мөмкин. Шулай итеп, әсә, ҡатын-ҡыҙ донъя көтөүгә, ғаиләне, ырыу-нәҫелде һаҡлауға ла тос өлөш индергән. Был, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙың статусын күтәрмәй ҡалмаған.

Традицион башҡорт ғаиләһендә әсә статусының юғары булыуын тағы ла ҡатын-ҡыҙ артынан килгән бирнә, мал-мөлкәт тәьмин иткән. Йола буйынса, ул, беренсенән, тос ҡына булған. Икенсенән, ҡатындың шәхси милке булараҡ, бирнә мираҫ бүлгән саҡта ҡатнашмаған, йәғни ағай-энеләргә китмәгән. Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙ артынан килгән мал-мөлкәт әсәнең хоҡуҡи статусын күтәргән.

Ислам динен ҡабул итеү ҙә әсә статусын күтәреүгә ыңғай йоғонто яһаған, сөнки исламдағы “Йәннәт әсәләрҙең аяҡ аҫтында” тигән ҡараш боронғо башҡорттар ҡарашына яҡын булған.

Шул уҡ ваҡытта традицион башҡорт ғаиләһендә бер ваҡытта ла әсә менән ата, ир менән ҡатын ролдәре, урындары, функциялары буталмаған. Сағыштырығыҙ: ата — алтын ҡаҙаҡ, инә — алтын ҡанат; ир — ат, ҡатын — арба; ир таба, ҡатын тота; атанан йәш ҡалдым, аҡылдан буш ҡалдым; ата балаһы ҙур булмаҫ һ.б. миҫалдар күрһәтеүенсә, ата, ир кеше — төп табыусы, урысса әйткәндә “добытчик”, ғаиләне, ил-йортто ҡурсалаусы, аҡыл биреүсе, әйҙәүсе, хужа, терәк. Шулай итеп, традицион башҡорт ғаиләһендә һәр кемдең үҙ урыны, үҙ роле булған. Шуға ла, нисек кенә әсә статусы юғары булмаһын, ғаиләгә, ғаилә институтына ҡурҡыныс янамаған.

Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, бөгөн бөтөнләй икенсе хәл барлыҡҡа килгән.

Үрҙә әйтеп киткәнсә, традицион башҡорт ғаиләһендә әсәнең статусын өс фактор билдәләгән:

— йәш быуынға ғүмер биреп, бағып, социализацияһында, йәғни әҙәм итеүҙә төп роль уйнауы;

— ғаилә тормошына, көнкүрешенә, хужалыҡҡа тос өлөш индереүе;

— ата йортонан үҙе менән малмөлкәт, бирнә килтереүе.

Дөйөмләштереп әйткәндә, традицион ғәиләлә, ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләгә һәм йәмғиәткә индергән өлөшө уның статусын билдәләгән. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының индергән өлөшө тос булған, шул сәбәпле уның статусы ла юғары булған. Ошо принципты нигеҙ итеп алһаҡ, бөгөнгө башҡорт ҡатын-ҡыҙының да статусы юғары булырға тейеш, сөнки ғаилә экономикаһына, тормош-көнкүрешенә, тәрбиә эшенә әсәнең индергән өлөшө элеккенән кәм түгел. Был һәр кемгә мәғлүм.

Бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙың, әсәнең йәмғиәт тормошона индергән өлөшө лә ҙур. Беренсенән, хужалыҡтың ҡайһы өлкәһен генә алһаң да, унда бик күп ҡатын-ҡыҙ эшләй. Мәҫәлән, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә 80 проценттан ашыу ҡатын-ҡыҙ эшләй. Мәғариф, финанс-кредит, мәҙәниәт, элемтә, сауҙа, фән өлкәһендә ҡатын-ҡыҙ бик күп. Сәнәғәттә, ауыл хужалығында ла ҡатын-ҡыҙ аҙ түгел. Бизнес менән булышыусыларҙың 60 процентын ҡатын-ҡыҙ тәшкил итә. Икенсенән, белем яғынан ҡарағанда ла ҡатын-ҡыҙ артта ҡалмаған. Мәҫәлән, студенттарҙың 55 процентын, фән менән булышҡандарҙың 52 процентын, юғары белемлеләрҙең ҡайһы бер өлкәләрҙә 60 процентын ҡатын-ҡыҙ тәшкил итә.

Шуға ҡарамаҫтан әсәнең, ҡатын-ҡыҙҙың статусы бөгөнгө ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә юғары түгел. Ғаилә тормошонда ире, хатта бала-сағалары тарафынан түбәнһетелеп, иҙелеп йәшәгән ҡатындар булыуы ошоно дәлилләй. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, әлегә бындай ҡатындар, әсәйҙәр тураһында мәғлүмәттәр юҡ кимәлдә, сөнки бик күптәр уны йәшерә. Әсә, ҡатын-ҡыҙ статусының ғаиләлә бик түбән булыуын ире, балалары тарафынан үлтерелгән ҡатындар тураһындағы материалдар ҙа күрһәтә. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, бындай төр енәйәт артҡандан арта. Үлтерелгәндәр араһында күп балалы әсәйҙәр, йәш ҡатындар, хатта юғары вазифа биләгәндәр булыуы, ә үлтереүселәрҙең бөтәһе лә эскесе йәки шизофреник булмауы, ысынлап та, ғаиләлә, йәмғиәттә әсә статусының бөгөн түбән булыуын раҫлай. Шулай итеп бөгөн йәмғиәттә һәм ғаиләлә парадоксаль ситуация килеп тыуған: ҡатын-ҡыҙҙың, әсәнең роле артҡан, ә статусы

кәмегән, төшкән. Бындай ситуация, тәбиғи, бик күп социаль, демографик проблемалар тыуҙыра: ғаиләләр тарҡала, балалар һаны кәмей, тулы булмаған ғаиләләр, етем, никахһыҙ тыуған балалар, хоҡуҡ боҙоусылар көндән-көн арта. Дөйөм алғанда, традицион ғаилә институтына бөгөн ҡурҡыныс янай. Нисек был афәттән ҡотолорға һуң тигән һорауға дәүләт органдары, йәмәғәтселек, ғалимдар яуап эҙләй, ҡотолоу юлдарын билдәләй. Һуңғы йылдарҙа был тәңгәлдә республикала бик күп эштәр эшләнде. Беренсенән, әсәлекте, ғаиләне яҡлауға, ҡурсалауға йүнәлтелгән закондар, указдар, ҡарарҙар, дәүләт программалары ҡабул ителде. Мәҫәлән, 2000 йылда ғына күп балалы әсәйҙәргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү йүнәлешендә генә июлдә — закон, сентябрҙә указ ҡабул ителде. Әсәлек, балалыҡ проблемаларын хәл итеүгә йүнәлтелгән, республикала традицияға әүерелгән исемле йылдар булдырылды. Ғаилә йылы, Бала йылы, Йәштәр йылы үткәреү, әлбиттә, ҡайһы бер конкрет проблемаларҙы хәл итеүгә ярҙам итте. Исемле йылдар үткәреү әсә, ғаилә проблемаларына йәмәғәтселектең дә иғтибарын йәлеп итергә мөмкинселек бирҙе. Һәм йәмәғәтселек тарафынан ғаилә, әсәлек ҡиммәттәрен пропагандалауға күп көс һалынды. Шулай итеп, дәүләт структуралары, йәмәғәтселек ғаилә, әсә проблемаларын хәл итеүгә күп көс һала. Әммә быға ҡарамаҫтан проблема кәмемәй, киреһенсә киҫкенләшә. Шуғалыр ҙа 2001 йыл республикала Әсә йылы тип иғлан ителде. Әсәнең, ҡатын-ҡыҙҙың хәлен яҡшыртыуға, ролен күтәреүгә йүнәлтелгән дә инде был йыл. Указға ярашлы, Әсә йылын үткәреү буйынса Министрҙар Кабинеты, министрлыҡтар, башҡа структуралар аныҡ пландар ҡабул итте. Был пландарға ингән саралар араһында “Хәүефһеҙ әсәлек” буйынса урындарҙа маҡсатлы программалар эшләү ҡаралыуы бигерәк тә әһәмиәткә эйә. Һәр районның, һәр төбәктең социаль, тарихи, традицион үҙенсәлектәренән сығып эшләнгән маҡсатлы программалар демографик ситуацияны, әсәнең хәлен, ролен үҙгәртергә мөмкинселек бирәсәк.

Әсәнең, ҡатын-ҡыҙҙың ролен, статусын күтәреү өҫтөндә быйыл йәмәғәтселек тә күп эшләргә тейеш. Әгәр дәүләт органдары әсәнең хәлен яҡшыртыу өҫтөндә эшләһә, йәмәғәтселеккә инде төп иғтибарҙы әсәнең ролен, статусын күтәреүгә йүнәлтер кәрәк. Бының юлдары һәм ысулдары төрлө. Мин шуларҙың береһенә генә туҡталырға теләйем.

Парадоксаль күренһә лә, әсә статусын күтәреү өсөн, минең уйымса, иң тәүҙә ғаиләлә атай кешенең ролен, статусын күтәреү кәрәк, сөнки бәләкәй эш хаҡы алған, ғаилә тормошкөнкүрешенә, бала-саға тәрбиәләүгә бик аҙ өлөш индергән шәхес булараҡ өлгө була алмаған ирҙә төрлө комплекстар барлыҡҡа килә. Ошо комплекстар арҡаһында ул йә быҙауға, йә яһилға әйләнә. Быҙауға әйләнгәненә һәр кем аяҡ һөртә алһа, яһилы, киреһенсә, физик көсөнә таянып ҡатынын, бала-сағаларын иҙергә, түбәнһетергә тырыша. Ошондай ирҙәр хатта ҡатынын, балаларының әсәһен үлтереүгә лә барып етә. Әлбиттә, был енәйәттең күп осраҡта шаһиты булған йәш быуын алдында әсә статусы үҙенән-үҙе кәмей. Шулай итеп яман сир быуындан быуынға күсә. Шуға ла бөгөн киләсәк өсөн ғаиләлә, йәмғиәттә малайҙан — атай, ҡыҙҙан әсәй тәрбиәләү зарур. Бының өсөн йәмәғәтселек, ғалимдар тарафынан бөгөнгө көн талаптарына яуап биргән, шул уҡ ваҡытта традицион башҡорт сифаттарын үҙ эсенә алған ир һәм ҡатын, ата һәм әсә моделе булдырырға кәрәк. Ир моделендә, минеңсә, иң мөһиме табыусы, урыҫса әйткәндә “добытчик” булһа, ә ҡатын-ҡыҙҙа — әсәлек беренсе урында булырға тейеш. Әгәр ҙә беҙ күмәкләп ошо моделде булдырһаҡ, шул модель буйынса тәрбиә эше алып барһаҡ, ғаиләлә һәр кемдең үҙ роле, үҙ статусы буласаҡ, халҡыбыҙ ҙа халыҡ булараҡ яңы меңйыллыкта йәшәйәсәк.